

*Хисаметдин ХӘЙБУЛЛИН,*
*Башҡортостан Республикаһының*
*атҡаҙанған мәғариф хеҙмәткәре,*
*Өфө ҡалаһының 20-се башҡорт*
*гимназияһы директоры*

# БАШҠАЛАНЫҢ БАШҠОРТ МӘКТӘБЕ

Фатима Мостафина исемендәге Өфө ҡалаһының 20-се башҡорт гимназияһы — башҡаланың Совет районындағы берҙән-бер башҡорт мәктәбе. Гимназия тарихында директор вазифаһын байтаҡ педагогтар үтәгән: Йәһүҙин Туғыҙаҡ Илһам улы (1970-73 йй.), Хафизов Марат Мөхәммәтйән улы (1973-80 йй.), Бәхтийәров Вил Шәйҙулла улы (1980-82, 1984-85 йй.), Абдуллин Байыҡ Камал улы (1982-84 йй.), Камалова Лира Шәрип ҡыҙы (1985-87 йй.), Теүәлов Ғәйнетдин Зәбихулла улы (1987-90 йй.). Мин 1990 йылдан ошо вазифаны атҡарып киләм.

Гимназияла уҡытыу һәм тәрбиә эше 8-се синыфҡаса башҡорт телендә генә алып барыла. Башланғыс синыф уҡытыусыларының эште эҙмә-эҙлекле, дөрөҫ ойоштороуы һөҙөмтәһендә бала милли мөхиттә үҙ телендә иркен һөйләшә, яҙа, фекерен аңлата, шунлыҡтан уның үҙаңы ла етеҙ үҫешә. Уҡытыу-тәрбиә эше һәр уҡыусы Башҡортостанда дәүләт телдәрен, йәғни башҡорт һәм рус, шулай уҡ халыҡ-ара аралашыу телдәрен белергә тейеш тигән принципҡа нигеҙләнеп ҡоролған.



Беренсе синыфҡа килгән баланы шәхес кимәленә күтәреү өсөн, уҡытыусыға һиҙемле психолог, абруйлы педагог, яҡшы белгес булыу мотлаҡ. Бына ошо маҡсаттарҙы күҙ уңында тотоп, гимназияның башланғыс синыф уҡытыусылары, 90-сы йылдар башында яңыса уҡытыу кәрәклеген тойоп, бик ҙур эҙләнеү, һынап ҡарау эштәрен башланы.

емештәрен оҙаҡ көттөрмәне — уҡытыу сифаты бермә-бер күтәрелде. 90-сы йылдар башында юғары уҡыу йорттарына уҡыусыларыбыҙҙың 45-50 проценты инһә, артабан был күрһәткес 70-82 процент тәшкил итте. Һөҙөмтәлә һуңғы биш йыл эсендә гимназияны 42 уҡыусы алтын һәм көмөш миҙалдарға тамамланы. Дөйөм алғанда, йыл һайын



*Уҡытыусылар коллективы*

Коллектив алдына юғары кимәлле белгес булып үҫеү, инновацион белем-тәрбиә биреү системаларын өйрәнеү, яңы уҡытыу технологияларын үҙләштереү буйынса юғары талаптар ҡуйылды. Ошо ваҡыттан уҡытыусылар өсөн ысын мәғәнәһендә белемдәрен камиллаштырыу башланды. Ете кеше өс йыл Төмән ҡалаһында Эльконин-Давыдов концепцияһына нигеҙләнгән «Үҫешле белем биреү» («Развивающее обучение») тип аталған уҡытыу-тәрбиә системаһын өйрәнде. Артабан Төмән, Харьков, Мәскәү ҡалалары ғалимдары менән бәйләнеште өҙмәнек. Ныҡышмалы хеҙмәт үҙ

гимназияны тамамлаусы балаларҙың 97-99 проценты юғары уҡыу йорттарында уҡыуҙарын дауам итә, улар араһында инженер, юрист, журналист, артист, иҡтисадсы, тарихсы һәм башҡа һөнәрҙәрҙе һайлаусылар күп. Гимназияға йыл һайын Өфөнөң төрлө райондарынан һәләтле балалар уҡырға килә, тимәк, тағы ла эҙләнергә, киләсәк быуын өсөн аҡыл көсөн йәлләмәй сарыф итергә урын бар.

Коллективта көслө белгестәр, тәрбиәселәр — бөтәһе 72 кеше эшләй. Дәүләтшина Мәрхәбә Сәйғәфәр ҡыҙы башланғыс синыфтарҙа уҡытып, яңы уҡытыу техноло-





*Лэйсэн Сөлэймэнова*

гияһын өйрәнде лә, башланғыс синыфтар методикаһы буйынса диссертация яҡлап, фән кандидаты булып китте. Мәүлийәрова Әлфиә Тимербай ҡыҙы әлеге көндә Мәскәүҙә диссертация яҡларға әҙерләнә. Гимназиябыҙҙың танылған, хөрмәтле, Башҡортостандың яңы граждандарын үҫтереүгә, уларҙы белемле, ғилемле итеүгә күп көс һалған уҡытыусылары исемлеген тағы ла дауам иткем килә: Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған уҡытыусылары: Ҡужина Гөлкәй Сәлмән ҡыҙы, Сынбулатова Фәниә Шөғәйеп ҡыҙы, Хәсәнов Мирхәт Әхмәҙулла улы , Сөләймәнова Флүрә Ғөбәйт ҡыҙы (вафат булды); Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, тарих фәндәре кандидаты Бикбаев Рауил Әфләтүн улы; Рәсәй Федерацияһының мәғариф алдынғылары: Хәсәнов Мирхәт Әхмәҙулла улы, Изергин Эдуард Тимофеевич, Хоҙайбирҙина Дилбәр Алтын ҡыҙы; Башҡортостандың мәғариф алдынғылары: Уразаева Рина Мөхәммәт ҡыҙы (инглиз теле), Мәксүтова Менәүәрә Абдулхай ҡыҙы (математика), Илһамова Рәүфә Мөхөтдин ҡыҙы (рус теле), Бураншина Зөлфиә Ташбулат ҡыҙы (химия), Юнысбаева Нәфисә Рәфҡәт ҡыҙы (биология), Бикбулатова Зөбәйҙә Фәсхетдин ҡыҙы (тарих), Ҡаһарманова Гөлсирә Камил ҡыҙы (тарих), Камалиев Салауат Тимерхан улы (география), Мурзанова Мөхтәрәмә Сәрүәр ҡыҙы (инглиз теле), Сабирова Хәфирә Хәбир ҡыҙы (өлкән тәрбиәсе), Ишбулатова Сания Алберт ҡыҙы (башланғыс синыфтар уҡытыусыһы). Өлкән, тәжрибәле уҡытыусылар менән бергә йәштәрҙең дә күп булыуы үтә лә шатлыҡлы күренеш: быуындар бәйләнеше, эшлекле традициялар дауам итәсәк.

Ошо йылдарҙа тырышлыҡ, эҙләнеүҙәр һөҙөмтәһендә, гимназияла көслө ғилми-методик эштәр ойошторорҙай кадрҙар төркөмө барлыҡҡа килде. Башҡорт дәүләт педагогия университеты профессоры Вадим Фәтхи улы Сафин етәкселегендә юғары уҡыу йорттары ғалимдары менән гимназия уҡытыусылары хеҙмәттәшлеге һөҙөмтәһендә «Ватан» исемле ғилми тикшеренеү үҙәге барлыҡҡа килде. Республиканың башҡорт башланғыс мәктәптәре өсөн инновацион уҡытыу технологияһы, үҫешле белем биреү системаһы ойошторолдо, башланғыс мәктәп өсөн 1-4 синыфтарға тәғәйенләнгән «Әлифба», «Әсә теле», «Туған тел», «Рус теле» дәреслектәре донъя күрҙе, уҡытыу программалары әҙерләнде. Улар гимназияла һынау үтеп, тикшерелеп, Башҡортостан Мәғариф министрлығы тарафынан раҫланып, республика мәктәптәренә тәҡдим ителә.

Әлеге көндә гимназия башҡорт мәктәптәре өсөн һынау үткәреү, тәжрибә туплау майҙансығына әйләнде. Майҙансыҡтың етәксеһе — Башҡортостандың мәғарифты үҫтереү институты хеҙмәткәре, педагогия фәндәре кандидаты Булат Хәләф улы Юнысбаев.

Гимназия гуманитар, иҡтисади белем биреү йүнәлешендә эшләй. Шул уҡ ваҡытта телдәрҙе өйрәнеүгә баҫым яһала. Инглиз теле аҙнаһына биш сәғәтлек программа буйынса уҡытыла. Бишенсе синыфтан

башлап информатика фәне өйрәнелә, тағы ла өҫтәлмә түләүле дәрестәр алып барыла. Мәҫәлән, ритмика, каратэ-до дәрестәре.

Балалар бер сменала ғына уҡып, төштән һуң тиҫтәнән ашыу төрлө түңәрәктәргә йөрөй ала. Республика, ҡала, район кимәлендә үткәрелгән фестивалдәрҙә, конкурстарҙа гимназия уҡыусылары һынатмай, дипломанттар, лауреаттар булып ҡайта. Мәҫәлән, Ләйсән Сөләймәнова 1999 йылда республиканың «Ирәндек моңдары» төбәк конкурсында, 2000 йылда Туймазы ҡалаһында ойошторолған «Оҙон көй» республика бәйгеһендә дипломант, 2002 йылда Өфөлә «Серле йондоҙҙар» конкурсында лауреат булды. Башҡортостандың Фәйзи Ғәскәров исемендәге академия бейеү ансамбле солисткаһы Гөлимә Мырҙағәли ҡыҙы Әхмәтшина ойошторған бейеү ансамбле — һәр бер мәҙәни сарабыҙҙың сағыу биҙәге. Бөрйән районынында 2001 йылда «Урал батыр» эпосы буйынса ойошторолған республика конкурсында гимназия 4-се урынды яуланы, ә 2002 йылда дипломант булды (етәксеһе ритмика уҡытыусыһы Сөләймәнова Ләлә Әхмәткәрим ҡыҙы). Һуңғы ике йылда гимназияның «Йәншишмә» фольклор ансамбле башҡаланың «Серле йондоҙҙар» фестивалендә дипломант булды (етәксеһе Миләүшә Булат ҡыҙы Ғәлина).

Гимназияның данын арттырыусы элекке уҡыусыларыбыҙ бихисап. Улар Башҡортостанда, Рәсәйҙә, хатта сит илдәрҙә эшләп йөрөй. Мин уларҙың ҡайһы берҙәрен генә һанап үтәм. Мәҫәлән, Илгиз Рәшит улы Ирназаров — биология фәндәре докторы, Польшала йәшәй һәм эшләй. Ҡотоева Эльвира — Венгрияла банк етәксеһе. Беҙҙең ҡыҙҙар араһынан да Башҡортостан банктарында эшләүселәр бар. Ҡурайсы Юлдашев Роберттың даны хәҙер сит илдәрҙә лә билдәле. Псәнчин Юлай Вәли улы — филология фәндәре докторы, БДПУ-ла уҡыта. «Аманат» студияһының директоры Илдар Ғафаров та беҙҙең уҡыусы. «Ант» төркөмө солистары Алмас Ғафаров менән Рәмил Ихсановты кеҫеһенән алып өлкәненә тиклем танийҙар. «Аҙна» нәшриәт йортоның генераль директоры Артур Иҙелбаев, танылған композитор Урал Иҙелбаев, «Башҡортостан» киностудияһының баш режиссеры Булат Йосопов — беҙҙең ғорурлығыбыҙ.

Спортта ил шаулатҡан, дан-шөһрәт ҡаҙанған егет һәм ҡыҙҙарыбыҙ бар: Хәмитов Тимур футбол буйынса Европаға билдәле чемпион, Хәмитова Әлфирә — каратэ-до буйынса Рәсәй һәм Башҡортостан призерҙары.

Гимназия исеменә тап төшөрмәй, ил данын үҫтерер, арттырыр уҡыусыларыбыҙ — беҙҙең коллективтың фиҙакәр хеҙмәт емеше, Башҡортостандың киләсәге.

*1-се синыф уҡыусыларында ритмика дәресе*

